# Сыбыҡ атта — бар йыһанды урап



Дамир Шәрәфетдинов

*Башҡорт әҙәбиәтенең төп көсө — урта быуын. Улар, йөк аты кеүек, иңдәренә иң яуаплы, кәрәкле һәм мөҡәддәс бурыстарҙы алып, ижад итә, әҙәбиәтебеҙ офоҡтарын киңәйтә. Дамир Шәрәфетдинов та үҙ тиңдәштәренән тәү ҡарашҡа әллә ни айырылмай, ләкин һәр ижадсының үҙенә генә хас тормошҡа ҡарашы, йәшәү рәүеше әҫәрҙәре аша бөтөнләй яңы донъяны аса. Шағир, прозаик, тәржемәсе һәм журналист замандашыбыҙҙың тормош һуҡмағына, ижад юлына күҙ һалайыҡ әле.*

*Дамир 1965 йылдың 29 майында Белорет районының бәләкәй генә Көмбә ауылында Бөйөк Ватан һуғышы ветераны Мөлкаман ағай менән Зөлфиә апай ғаиләһендә унынсы бала булып донъяға килә, артабан ике ҡустыһына ла ағай булып китә. Башланғыс класты ауылында, аҙаҡ Иҫке Хәсәндә, ә урта мәктәпте Инйәр ҡасабаһында тамамлай. Башҡортостан ауыл хужалығы институтында уҡыған саҡта әҙәбиәт менән мауығып китә. Муса Сиражи етәкләгән “Бөрөләр” әҙәби түңәрәгенә йөрөй. Тәүге шиғырҙарын район гәзите “Урал” да баҫтыра. Йүнәлтмә буйынса Орел өлкәһенә эшкә ебәрелә. Унда өс йыл күҙ асып йомған арала үтеп тә китә. Тыуған яҡҡа ҡайтҡас, тәүҙә һөнәрен алыштырып, “Урал” район гәзитендә эшләй башлай. Ваҡытлыса ғына тип башлаған эш ғүмерлек һөнәргә әйләнә. “Йәшлек” гәзитендә, “Тамаша”, “Аманат”, “Шоңҡар” журналдарында хеҙмәт иткәндән һуң, әлеге ваҡытта “Ағиҙел” журналында яуаплы сәркәтип булып эшләй. Тормош иптәше Рима ханым менән Лилиә исемле ҡыҙ үҫтерәләр. Д.Шәрәфетдиновтың “Икеләнеү”, “Йөрәктәге ташыу-ҡайтыуҙар”, “Йәшел байлыҡ. Аяҡ аҫтындағы байлыҡ”, “Таулы төбәк — беҙҙең төйәк. Иҙел башы тураһында бәйән”, “Көн башы һуҡмаҡтары. Тропинки рассвета”, “Төнгө усаҡ” китаптарын уҡыусылар яратып ҡабул итте. “Аҡ торна” Халыҡ-ара төрки телле шиғриәтте рус теленә тәржемә итеү буйынса конкурс лауреаты, Ш.Хоҙайбирҙин исемендәге премия лауреаты, БР мәғариф алдынғыһы.*

Ялҡын телдәре төнгө ҡараңғылыҡты йыртырға теләп, берсә үрһәләнә, берсә ел ыңғайына тирә-йүнде ялмап-ялмап ала. Ҡыҙған күмер өҫтөндә бейегән йәш сиған ҡыҙын хәтерләтеп ҡуя. Арымай-талмай юғарырға ынтыла. Ләкин аяҡ аҫтарындағы ҡуҙҙар көл өйөмөнә әйләнеп, ваҡыт уҡтарын һанай. Усаҡ тирәләй йыйылған малайҙар төнгөлөккә аттарын тышаған да, гәпләшеп ултыра. Ара-тирә йылҡыларҙың ҡыңғырауы, йәки ҡолондары ғына малайҙарҙың төнгө хәбәрҙәрен ҡеүәтләгәндәй. Ҡолаҡ төбөндә йонсотоп безелдәгән серәкәйҙәр ҙә, усаҡҡа атылған шайтан күбәләктәре лә, йылға аша ғына үҙ биләмәһен барлап гөрөлдәгән өкө лә, ҡыуыш янындағы шишмәнең наҙлы йыры ла малайҙарҙың иғтибарын йәлеп итмәй. Уларҙың “үҙ бише биш” тигәндәй, тирләп-бешеп, көнө буйы күгәүендән талана-талана бесән сабып арыһалар ҙа, төнгө ҡыҙыҡлы, мөғжизәле, йә булмаһа тарихи ваҡиғалар тураһында хәбәрҙән нисек ҡолаҡ ҡағаһың?! Тап ошондай илаһи күренеш Дамирҙың хәтеренә уйылып ҡалған. Улай ғына ла түгел, тәүге поэтик образдар, шиғри юлдар күңел ҡылдарын тирбәтеп, тос орлоҡтар булып тупланғандар.

Тауҙар, урмандар араһында йәшәгән кешеләрҙең тормошо, йәшәйеше бер-береһенә бик оҡшаш. Башҡортостаныбыҙҙың иң ҙур, күркәм районы — Белоретта тыуып үҫкән Дамир Шәрәфетдиновтың да бала сағы, үҫмер йылдары тәбиғәт менән бәйле, тәбиғәттең үҙендә үтә. Яҙыусы быйыл сыҡҡан “Көн башы һуҡмаҡтары” автобиографик повесында бала сағының бер миҙгелен һүрәтләй. Повесть башҡорт һәм рус телдәрендә нәшер ителде. Әҫәрҙең нигеҙендә бер төркөм малайҙарҙың йәйге каникул мәлендә төрткө-сысҡан тотоп аҡса эшләүҙәре, төрлө мажаралары ята. Бала саҡтан егәрле, тырыш һәм яуаплы булып үҫә Дамир. Малай саҡтан уҡ ҡоштар телен аңлап, урман моңон отоп, бар тәбиғәт һулышын тойоп үҫә. Шуға ла ошо мәлгә айырым иғтибар биреп:

Бала саҡта — ишек алды
Ер шарылай иркен саҡта, —

тип өндәшә. Эйе, уның күңел донъяһын ваҡ мәшәҡәт, юҡ-бар яуламай, ә офоҡтарҙы иңләр иркен ҡараш, тәрән фәлсәфәүи уйҙар биләп ала.

Ишетһәгеҙ әгәр йылға йырын,
Тимәк, тарих һөйләй ҡаялар.

Шағир тауҙарҙың серен аңларға, яраларын күреп, дауаларға ла әҙер. “Ямантау” шиғырында авторҙың һыҙланыуҙарында тарих шаңдауҙары ишетелә, киләсәккә борсолоуҙар арта бара. Кеше һәм тәбиғәт, тәбиғәт һәм кеше берлеге генә түгел, ә мәңгелек бәйләнештең диалектикаһы ла шиғырҙарҙа күп урынды биләй. Д.Шәрәфетдиновтың граждандлыҡ лирикаһында бәләкәй ватан образы үтә лә ентекле, ҡыҙыҡлы һүрәтләнгән. Шиғырҙарҙа типик образдар түгел, ә ижадсының офоҡ даирәһен билдәләр ҡараштар өҫтөнлөк итә:

Иҙел башы тиҙәр. Тыуған яғым,
Йүрүҙән дә һиндә, Инйәр ҙә.

Йәки:

Мин ғашиҡмын һиңә, тауҙар иле,
Ҡайындарҙың шаулы йырына.

Һөйгән йәреләй, ғәзиз әсәһеләй, шуҡ балалай күргән Инйәре шағир күңеленә дауа булып яғыла. Ошо ергә, ошо төбәккә тамырҙары менән береккән халҡы яҙмышын уйлап, хафаларға сума:

Заман боҙған тәбиғәтле,
Ерһеҙ генә илле башҡорт
Үҙенә лә етмәгәнде
Башҡаларға йөрөй ташып...

“Башҡортлоҡ” шиғырында Рәйес Түләк башлап ебәргән идеяны дауам итә, өр-яңы яҡтарын аса.

Д.Шәрәфетдинов шиғриәтенең лирик геройы үтә тәбиғи һәм уйҙар дарьяһында иркен йөҙөүсе лә. Һәр күренешкә, ваҡиғаға, тормошҡа ҡабатланмаҫ ҡараш менән баға:

Мәңгелеккә әйҙәй йор шаршылар,
Моңдарына сумам ҡыуанып.
Алып китһен ине уйҙарымды
Тормошомдоң шаян йылғаһы.

Шағир “Монар” шиғырында традицион форманан ҡасып, биш юллы строфаның ааббб рифмаһын оҫта ҡулланып, ғүмер миҙгелдәрен үлсәй.

Быуаттарҙың үле тынлығында
Өнһөҙ генә ҡарап торамын
Йөрәк аша ваҡыт уҙғанын.

Ваҡыт төшөнсәһе автор өсөн бер мөғжизә, бәхәсләшер тәғлимәт тә. “Балан” шиғырында ваҡыттың әйләнмә уйнауы, ә “Сағыл таштан”, “Яҙ шаңдауы”нда лирик геройҙың:

Сөнки бында күптән яҙ яҙ түгел,
Йөрәк һыҡрандырмай йыр-моңдар...
Серле һағыш. Тоноҡ шаңдау тоям.
Тәбиғәттең яҙғы туйында, —

тип һағышланыуы йәнде өҙгөләй. “Зыярат”, “Оран” шиғырҙарында заман зары, ҡотһоҙ ысынбарлыҡ быуар йылан кеүек быуһа ла, офоҡтағы яҡтылыҡҡа өмөт һүнмәгәндәй.

Яраланған йылдар ҡорбаны беҙ,
Тик йөрәк көс әле табырҙай, —
Ауаздарын беҙҙең йотҡан сирҙең
Толмай үҫһен тыуар сабыйҙар!

Йә булмаһа:

Мине ерләр быуын үҫмәгән дә —
Сабырыраҡ, зинһар, ян, йөрәк...

Барыһы менән генә килешеп ҡалмай, үҙ дәғүәләрен дә фәлсәфәүи дөйөмләштерә:

Толмай юлдың саҡор-соҡорҙарын,
Ҡамсылайһың заман-саптарын.
Белһәң ине: көтөү боролғанда
Алға сыға малдың аҡһағы!..

Ваҡыт, арауыҡ төшөнсәләре, фәлсәфәүи категория булараҡ, һәр кемде уйландыра, мәңгелек һорауҙар солғанышына сойорғота. Ә шағирҙың үҙ ҡарашы — ул ҡабатланмаҫ мәлде күрә лә, күрһәтә лә:

Ултырайыҡ. Уйлай күрмә,
Ҡушағыр тип туҡтарға.
Күреп ҡал, ана — был көн дә
Шым ғына китеп бара,
Ғүмерең үтеп бара.

Ғүмерҙең бөгөлдәре лә ҡәҙимге түгел, “малай сағы баҡсала ҡыяр урлаһа”, “егет уға бармаҡ янап, хаталар төҙәтә”. Ә “Йәшлек юлы” шиғыры был миҙгелдең оло тантанаһы:

Иртәгәгә йыйған болом да юҡ,
Үткәндәр ҙә ятмай иңемдә, —

тип өндәшә икән, ул битарафлыҡ түгел, ә шул осорҙоң иң шәп, иң оҫта һәм теүәл сағылышы бит! Шул мәлдә генә диңгеҙ тубыҡтан, донъя иңдәргә һыя.

Көнө буйы миндә даръя булып
Икһеҙ-сикһеҙ йыһан сайҡала, —

тип Дамир ғына әйтә алалыр.

Ҡыҫҡаһың, мәл, тип ҡыуанған күңел
Шулай ғүмер үтеүенә күнер, —

тип, мәңгелек ҡаршылыҡ сиктәрен поэтик фекергә төйнәй. Шағирҙың ижадында ошо йүнәлештә тынлыҡ, мәл, мәңгелек кеүек төшөнсәләрҙең үҙенсәлекле балҡыуы тағы ла бер яңылыҡ.

Шул саҡтарҙа уйсан күңелеңә
Тормош япҡан ҡырҡ ҡорама юрған
Асыла ла ҡапыл таң еленән,
Балҡып ҡуя алыҫ-алыҫтарҙан.

Минуттарҙы һанаусы йөрәк эшмәкәрлеген ҡайһылай халыҡсан итеп биргән.

Ысын булһа, ул бит йөрәгенә
Тейеш ине күптән атырға...
Йондоҙҙоңмо тыйып уҡталыуын
Саҡыра ла кәкүк саҡыра? —

тип икеләнә лә, ғүмер-саптарын ҡыуа ғына:

Йөрәк кенә, һәр аҙымды тойоп,
Ҡайтыр юлды, көндө гел һанай, —
Күңелдәргә һаман саң туҙҙырып,
Сыбыҡ атҡа менгән бер малай.

Күңелендә сыбыҡ атҡа менеп, уй-хыялы менән бар йыһанды урап, йөрәк тибеше аша заман ағышын тойоп ижад итә Дамир Мөлкаман улы.

Дамирҙың шиғриәте тау-таш ҡаяларҙан селтерәп кенә сыҡҡан шишмәләй башлана ла, киң даирәне, далаларҙы иңләр көскә әйләнә. Темаһы тәрәнәйә, проблематик киҫкенлек арта, өр-яңы идеялар менән байый. “Ҡәрәлек” шиғырында лирик герой ваҡыт һәм арауыҡ менән бик оҫта эш итә:

Быуаттарға быуындарҙы ялғап,
Йөрәгемә минең ул һуҙа
Ата-бабам бағышлаған йырҙы,
Ҡәрәлеккәй менән Ырғыҙҙа.

Ябай ғына шиғри строфала эпик киңлекте сағыу картина итеп бирә:

Йәшәй дала
Дүрт тарафҡа иҙерәп,
Илаһи күк ҡоя зәңгәрлек.
Башҡортомдоң булмыштарын биҙәп,
Мәңге аҡ һин шулай, Ҡәрәлек!

Д.Шәрәфетдинов ижадында эпик ҡоласлы әҫәрҙәр айырым урын биләп тора. “Сәскәлек”, “Урман”, “Мөхәббәт йондоҙлоғо”, “Ташландыҡ баҡса”, “Барҡылдаҡ һәм балтырған” поэмалары, “Гармунсы” балладаһы тематик яҡтан бай, форма төрлөлөгө менән айырыла. “Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу” әҫәренең жанрын яңы экиәт тип билдәләй автор.

“Сәскәлек” поэмаһының композицияһы үҙенсәлекле, тәү ҡарамаҡҡа үтә лә нескә хис-тойғолар ҡоршауында ҡалған кеүек булаһың. Үҙәктә — кеше һәм тәбиғәт мөнәсәбәттәре. Сюжет һыҙығын лирик геройҙың сәскәләр иленә сәйәхәте һигеҙ төрлө сергә төрөп бирелгән. Пролог менән эпилог та кинәйәле

фекерҙе башлап, кәрәкле урында төйнәп ҡуйғанды хәтерләтә. Поэманы айырым бүлектәргә бүлгән һәр сер донъя классиктары шиғриәтенән килтерелгән эпиграфтан башлана. Урта быуаттарҙағы фарсы шағиры Ғүмәр Хәйәм, төркмән Лахути, алтай Аржан Адаров, немец Гете, рус М.Лермонтов һәм Н.Заболоцкийҙың эпиграфтары — серле донъяға ишек. Сәскәлектә донъя гөрләп тора. Лирик герой, тәржемәсе кеүек, сирендән мөхәббәт тарихын, күксиндән кешеләрҙең геноцид сәйәсәтен, ромашка менән миләүшә диалогында кешеләргә иҫтәре китеп аптырауын, ынйыҡайҙың мөхәббәт хистәрен, яран менән һарынаның уйҙарын беҙгә еткерә. Сәскәләр тормошо ла кешеләрҙеке һымаҡ ҡатмарлы, мөғжизәләр менән тулы. Шағир уларҙың таңғы ысыҡтан сафланып, тәүге ҡояш нурҙарына ынтылып күҙҙәрен асҡанын, үҙ-ара серләшкәндәрен һәм бар булмышы менән донъяға матурлыҡ таратҡандарын күреп, һүҙҙәрҙән бер илаһи донъя төҙөй.

“Мөхәббәт йондоҙлоғо” поэмаһында автор тормоштағы драматик ваҡиғаны нигеҙ итеп ала. Героиня Хәмәҙиәнең тормошондағы иң трагик мәлде яҡтырта ла, үҙенең мөнәсәбәтен автор сигенеүе аша бирә. Хәмәҙиәнең яҡты хыялдары, мөхәббәт караптары тормош ысынбарлығы тигән утрауға бәрелә. Ҡотолғоһоҙ ысынбарлыҡ героиняны ҡорбан итә, ләкин һөйөү көсө уны күктәргә йондоҙ итеп сөйә. Шуға ла автор был парадокстарҙы күңел донъяһының тәрән кисерештәре аша уҙғара. Поэманың формаһы ла йөкмәткегә тура килә, автор ҡулланған строфалағы төрлө үлсәмдәр берсә дауыллы тулҡынды, берсә һил саҡтарҙы төҫмөрләргә булышлыҡ итә.

Д.Шәрәфетдиновтың “Урман”, “Ташландыҡ баҡса” поэмаларында лирик геройҙың тәрән уйланыуҙары, фәлсәфәһе урын алған. “Урман”дағы риүәйәт берсә тетрәндерә, берсә уйландыра. Шағир поэмала ваҡыт менән оҫта эш итә, шуға ла хронотоп бик ҡулай һәм уйланылған төҫлө. Лирик геройҙың тетрәнеүҙәре берсә шартлап, берсә һағыш булып тирбәлә:

Хатта рухы ҡалмаһын тип илдә,
Тоҡас та бит Себер һөргәндәр.
Рухты һөрөп буламы һуң инде?
Бәлки, ул — тап ошо имәндер.

Ҡеше мәңгелек көрәш юлында. Ҡайһы саҡ үтә үкенесле лә була:

Айыу ҙа сәп, һәм кеше лә
Тоғро ялсыға, —

тип ҡоллоҡ аңы биләгән әҙәм хаҡында уйлана. Ә беҙҙә ҡоллоҡ аңын шаршау итеп күпме әҙәми зат ғүмер итә!? Шағирҙың уйланыуҙары ла, раҫлауҙары ла бик урынлы бит!

“Ташландыҡ баҡса”ла автор баҡса һәм зыярат атамалары менән эш итһә лә, йәмғиәттәге байтаҡ социаль күренештәрҙе уҡыусыға поэтик образ аша еткерә.

“Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу” әҫәре бик ҡыҙыҡлы. Ҡомпозицион яҡтан ғәжәп бай, диалогтарға ҡоролған, сәхнә әҫәрен хәтерләтә. Заманыбыҙҙың сәйәси-социаль проблемаларын бик йәтеш, уңай ғына һүрәтләй. Тәүҙә йәмғиәттә бер генә төрлө баһаланмаған һайлау осоро кәүҙәләндерелһә, артабан идара итеү, кадрҙар әҙерләү мәсьәләләре тәбиғи рәүештә һүрәтләнә. Төп геройҙар Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыуҙан тыш Алтынша, Баш вәзир, Сәркәтип, Мәскәй образдарының хәрәкәттәре сюжетты тулыландыра, байыта. Дамир яңы әкиәте аша беҙҙең ысынбарлыҡҡа, йәшәйешебеҙгә күҙ һалып ҡына ҡалмай, ә актуаль мәсьәләләрҙе ҡабырғаһы менән ҡуя. Бына ҡайҙа ул шағир һиҙгерлеге, шағир тойомлауы!

Д.Шәрәфетдиновтың шиғриәтендә тәбиғәт, ҡоштар һәм йәнлектәр донъяһы — эпик киңлекте, тәрән фекер даирәһен барлыҡҡа килтерә. Уның “Барҡылдаҡ һәм балтырған” әҫәре “күңелһеҙ проза” тип билдәләнгән. Лирик герой ҡоштар

донъяһына эләгеп, хайран ҡалырлыҡ күренештәрҙе тасуир итә.

Күкте иңләр ҡоштоң ҡошон
Ерҙә һағалай хаслыҡ...

Йә булмаһа:

Һандуғасты төндә һайрай, тиҙәр,
Ғашиҡтарға арнап ул йырын,
Ысыҡ эсһә аҡһыл иртәләрҙә.
Шикләнергә бар шул, бар урын! —

тип һоҡланыуҙан күңеле йырлай.

Мин дә шулай, мөғжизәләр иңләп,
Таңғы ысыҡтарҙы ярған бар...
Ысыҡ түгел, ҡояшты ла күрмәй
Күңеленә биктәр һалғандар.
Йөрәктәре йырһыҙ ҡалғандар, —

тип, бар кешелекте байҡап, хайран ҡала.

Ижадында тәбиғәт байтаҡ өлөш алһа ла, шағир тормош ысынбарлығынан тайпылмай. "Гармунсы" балладаһында төп герой — замандашы. Ҡатмарлы ла, үҙенсәлекле лә заман бығауҙарына эләгеп, һынып ҡалған герой яҙмыштары аша башҡаларҙың да аяуһыҙ хәлдәрен аңларға ынтыла.

Д.Шәрәфетдинов шиғырҙарына байтаҡ ҡына композиторҙар мөрәжәғәт итә. А.Ғайсин, Э.Шардиҙың моңло йырҙары әленән-әле эфирҙа яңғырап тора. Күңеле лә, үҙе лә моңдо тойоп, моңда ғына йәшәй төҫлө.

Дамирҙың автобиографик повесынан өҙөк: "Әтәстәр ҡысҡырып тынмаған, ә башҡа тереклек көн башламаған аулаҡ ҡына миҙгел булып ала йәйге иртәлә. Мин уның ҡасан башланып, ҡасан бөткәнен дә беләм: беҙҙең сыбар әтәс тотлоғоп ҡалып, һыйыр һауырға сыҡҡан әсәйемдең биҙрә ҡылысы сылтырағанға тиклем була ул. Был мәлде күп кеше йоҡлап үткәрә, уяуҙары ла тоймай ҡала. Сөнки әҙәмде таңда матурлыҡ күреү теләге түгел, мәшәҡәттәре йөрөтә. Әле бына Шамил менән мин уяубыҙ ҙа, мәшәҡәттәребеҙ ҙә юҡ. Ярым хыялға, ярым илерткес хискә сорналып ят та ят әйҙә. Ошо мәлде һаҡлап ҡалырға теләгәндәй, Шамил үрелеп ишекте яба. Кисәге көндө, бөгөнгө төндө, быйылғы сысҡан миҙгелен япҡан һымаҡ ул миңә. Ул әйләнеп ятыуға, мин ипләп кенә гармун ҡумтаһын асам да, йомарланып бөткән дәфтәр килтереп сығарам. Бөтә кисергәндәрҙе, әлеге тойғоларҙы ерәй нисек яҙып ҡуйғы килә минең". Барыһы ла ғәҙәти, ләкин ихласлыҡ һәм ижади хыял ярылып ята.

Шағирҙың холҡон да, булмышын да "Башҡорт ҡыҙына" тигән шиғырҙа шәйләргә мөмкин.

Ундай ҡыҙҙар ҡайҙан мине күрһен,
Яндарында нисек туҡталһын?
Ә бит күрҙем — ашай ине күҙен —
Ҡулында бит минең китабым!.. —

тип сәпкә тейҙерә. Эйе, һүҙҙә лә, эштә лә, ижадта ла маһир егет ул шағир Дамир. Тик уның ҡәләменән генә:

Тынлыҡ булһа... Юҡ шул — әсе иңрәү:
Бында хужа булыр ҡол, ана,
Янда ғына көнлөк кәсеп менән
Хаслыҡ ҡыла ергә, халҡына, —

тигән юлдарҙы көтөргә мөмкин. Бөгөнгө көслө башҡорт шиғриәтенә ул үҙ моңон, ҡабатланмаҫ тәрән поэтик фекерен өҫтәй. Дамир дәүер ағышын йөрәк тибеше менән үлсәп, май иртәһендә таңғы ысыҡтарҙы кисеп, ҡанаттарын һандуғастай ҡағып, замандаштарына моң өләшә.